МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

Министерство образования и науки Республики Башкортостан

Администрации муниципального района Благоварский район

Республики Башкоротостан

МОБУ СОШ с.Кашкалаши

Рассмотрено на заседании ШМО учителей _начальных классов _ протокол № 1 от «30»августа 2023г.	Согласовано Отв. по УВР ________/ Аюпова З.Р../ « 30» августа 2023 г.	Утверждаю Директор школы: ________/Гильванов Х.Х/ Приказ № 30 от « 31 » августа 2023 г.

Руководитель ШМО
________________:
/Бахтиярова Г.Х. /

Рабочая программа

по государственному(башкирскому) языку для 1-4классов
начального общего образования

Составили учитель: Бахтиярова Г. Х., Платонова Р.Ф.
Срок реализации : 4 года

с.Кашкалаши 2023

Аңлатма яҙыу

1. 1-4 кластарҙа шәхсән, предмет-ара һәм предмет һөҙөмтәләре
/ Личностные, метапредметные, предметные результаты освоения учебного предмета в 1-4 кл./

Шәхсән һөҙөмтәләр (мәктәп уҡыусыларының башҡорт теленән төп программаны үҙләштереүе);

- Башҡортостан Республикаһында башҡорт теленең дәүләт теле булыуын аңлау: башҡорт телен өйрәнеүҙең эшмәкәрлек һәм профессиональ эшмәкәрлектә кәрәкле булыуын аңлау;

- башҡорт телен ғәмәлдә ҡулланыуға әҙерлек: үҙ-ара аралашыуҙа толерантлыҡ;

- башҡорт теленең башҡорт мәҙәниәте менән танышыу сараһы булыуын аңлау.

Метапредмет һөҙөмтәләр (рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнеү):

- телдән һәм яҙма хәбәр ителгән мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү;

- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты төрлө уҡыу төрҙәрендә ҡабул итеү;

- тыңланған һәм уҡылған тексты бирелгән эш төрҙәре (план, йөкмәткеһен һөйләү, конспект) менән яңынан һөйләй белеү;

- аралашыу сфераһы һәм шартына ҡарап, телмәреңде һәм яҙма телмәреңде төҙөй белеү, әңгәмә, фекер алышыу, дискуссияла ҡатнаша алыу;

- үҙ аллы белем ала белеү, төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары, интер- нет ресурстары, ваҡытлы матбуғат баҫмалары менән эшләй белеү; белешмә әҙәбиәт менән ҡуллана алыу;

- тәғәйен темаға материалды һайлап ала һәм системаға килтереү ысулдарын үҙләштереү; үҙ ҡарашыңды анализлай, сағыштыра, күрһәтә, һығымта яһай, йомғаҡлай, нигеҙләй белеү;

- башҡорт телен башҡа сығанаҡтарҙан мәғлүмәт алыу сараһы булараҡ ҡуллана алыу һәләтен үҫтереү;

- үҙ телмәреңде баһалау күнекмәләрен үҙләштереү;

- предмет-ара кимәлдә (туған тел, сит тел, әҙәбиәт) тел күренештәренанализлайбелеү.

Предмет һөҙөмтәләре

- төп аңлатмаларҙы үҙләштереү: тел һәм телмәр, телдән һәм яҙма телмәр, диалог һәм монолог, телмәр ситуацияһы, телмәрҙең функциональ стилдәре һәм типтары, текст; телдең системаһы: фонетика, лексика;

- башҡорт теленең телмәр берәмектәрен белеү, уларҙың билдәләре, һүҙ,

һүҙбәйләнеш, һөйләм, уларҙың үҙенсәлектәре;

- телмәр практикаһында ситуация һәм аралашыу стилендә тел берәмеген урынлы ҡулланыу;

- фонетик һәм лексик системаның төп үҙенсәлектәрен һәм рус теле менән сағыштырмаса башҡорт теленең грамматик төҙөлөшөн белеү;

- башҡорт әҙәби тел нормаларын һәм телмәр этикетын белеү, уларҙы әйтергә теләгән фекеренде төҙөгәндә, йәғни телдән һәм яҙма телмәр практикаһында ҡулланыу;

- төрлө төрҙәге лингвистик, ике телле һүҙлектәр менән ҡуллана белеү;

- төрлө функциональ стиль һәм жанрҙағы текст йөкмәткеһен уҡыу һәм аңлау: әҙәби (шиғыр, йыр, хикәйә)

- ғәҙәти темпта тәҡдим ителгән мәғлүмәтте (уҡытыусы телмәре, радио һәм телевидение дикторы телмәре һ.б.) аңлау;

- текст менән мәғлүмәт сығанағы булараҡ эш итә белеү, тексҡа төрлө аспектта

анализ, тексты планға, тезисҡа, конспектҡа өйләндереүҙең төрлө информацион төрҙәрен үҙләштереү;

- текст фрагменттарын рус теленән башҡорт теленә тәржемә итеү.

Программа адаптик йөкмәткегә ҡоролған.

- **Һөйләү телмәрен үҫтереү:**

1) картина буйынса һөйләү;

2) уҡыған тексты аңлы һөйләү;

3) шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;

4) йәштәштәре, ололар менән билдәле бер аралашыу сфераларында, ситуацияларҙа диалогик һәм монологик телмәр ойоштора белеү;

5)үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү.

- **Ишетеп аңлау (аудирование):**

1. уҡытыусының дәрес, уйын ситуациялары менән бәйле һорауҙарын, күрһәтмәләрен аңлау;

2. әңгәмәләштәшенең таныш материалға нигеҙләнгән һөйләмен аңлау, уға мөнәсәбәтен белдереү;
3. тыңлағанда һөйләм, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләү, интонацияны айырыу;
4. әҙәби әҫәрҙәрҙең, текстарҙың йөкмәткеһен тыңлап аңлау;
5. аудиотаҫмалағы әкиәт, хикәйәне ишетеп аңлау.

- **Уҡыу телмәрен үҫтереү:**

1. аңлап, дөрөҫ итеп уҡыу;
2. текстағы тыныш билдәләренә ҡарап, тейешле пауза һәм интонацияларҙы үтәү;
3. тексты үҙ аллы аңлы уҡыу;
4. унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу;
5. бәләкәй күләмле шиғырҙарҙы яттан һөйләү.

- **Яҙыу телмәрен үҫтереү**

1. айырым һөйләмдәрҙе, бәләкәй текстарҙы үҙгәрешһеҙ, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу;
2. матур яҙыу күнекмәләре;
3. байрам открыткалары яҙыу;
4. һүҙлек диктанты яҙыу.

2-4 кластарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте йөкмәткеһе түбәндәгесә билдәләнә:

- Һөйләшеү, аралашыу өсөн диалог темалары;
- Класта, өйҙә уҡыу өсөн әҙәби текстар;
- Фонетик, орфоэпик, орфографик, грамматик материалдар;
- Уҡыусыларҙың телмәр күнекмәләренә талаптар;
- Уҡыусылар үҙләштерергә тейешле һүҙҙәр теҙмәһе.

Уҡыусының башланғыс мәктәпте тамамлағанда һөйләү эшмәкәрлеге төрҙәре буйынса түбәндәге белемдәргә эйә булыуы күҙ уңында тотола.

II. Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр

1. Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар:

- Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;
- Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;
- Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү,исем биреү, элементар план төҙеү;
- Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;
- Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;
- Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;
- Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;
- Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү.

2. Уҡытыу һөҙөмтәләренә талаптар

I. Шәхси сифаттарҙы үҫтереү:
- донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү;
- үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу;
- телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү;
- башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

II. Метапредмет һөҙөмтәләр:
- уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;
- башланғыс класс уҡыусыһының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;
- уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

III. Предмет һөҙөмтәләре:
- башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс белешмә;
- (курс йөкмәткеһе кимәлендә) өн, хәреф, һүҙ кеүек тел берәмектәрен табыу һәм сағыштырыу һәләте.

IV. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү:

А. Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)

Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы

Һөйләү телмәрендә:

- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;
- элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы.

Тыңлап аңлауҙа:

- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмалардағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы.

Уҡыуҙа:

- өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау,
-текстан кәрәкле информацияны табыу.

Яҙма телмәрҙә:

- яҙыу техникаһына эйә булыу;
- үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү)

- башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
- төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм
- грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

Социомәҙәни компетенция географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

Б. Танып белеү сфераһы:

- айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;
- башланғыс мәктәп тематикаһы кимәлендә өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү;
- ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү;
- үҙ-үҙенде башланғыс класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;

В. Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:

- башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү;
балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

- Г. Эстетик сферала:

башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;
балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты таныға өйрәнеү.

Д. Хеҙмәт сфераһында:

- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

III. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе – 1-се класс

1. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

1. Башҡортостан- минең тыуған республикам. - 1 сәғәт.
Башҡортостандың ҡалалары, ауылдары, йылғалары, күлдәре тураһында мәғлүмәт биреү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау, темаға ҡараған башҡорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен камиллаштырыу.
2. Танышыу.-4 сәғәт.
Иҫәнләшеү. Танышыу диалогы. Һин ҡайҙан? Һиңә нисә йәш? Һинең туғандарың бармы?
Һорау бирергә, һорауҙарға яуап бирергә, диалог төҙөргә өйрәтеү.
3. Ғаилә. – 4 сәғәт.
Үҙенең ғаиләһе, ғаилә ағзалары, уларҙың эштәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте тураһында һөйләшеү. Башҡорт телендә эйәлек ялғауҙарын практик үҙләштереү.
4. Мәктәп. – 1 сәғәт.
Балаларҙың үҙҙәре уҡыған мәктәп, уның үҙенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, кабинеттарын белеүе. Һүҙҙәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе.
5. Уҡыу әсбаптары. – 3 сәғәт
6. Төҫтәр.-3 сәғәт.
Темаға ҡараған һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Һүҙҙәрҙә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар.
7. Һандар. – 2 сәғәт.
Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым хаҡы, уларҙың үлсәме, уларҙы һатып алыу, тәртипле тотоноу. Телмәрҙә һандарҙы практик ҡулланыу.
8. Уйын, уйынсыҡтар. – 3 сәғәт.
Уйынсыҡ исемдәре, билдәләре, уйындар. Башҡорт телендә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар.
9. Кем ни эшләй? – 2 сәғәт. Ни эшлә? Ни эшләгеҙ? Ни эшләмә? Ни эшләмәгеҙ? һоруҙарына яуаптар.
10. Тән өлөштәре. – 2 сәғәт.
Кешенең организмы, тән өлөштәре атамаларын үҙләштереү, тәнде таҙа тотоу, һаулыҡты һаҡлау.
11. Кейем-һалым. – 3 сәғәт.
Кейем-һалым исемдәре, уларҙың үлсәме, кейем һатып алыу, уларҙы бөхтә тотоу. Өҫ кейемдәре. Аяҡ кейемдәре. Баш кейемдәре. Башҡорт телендә килеш һәм зат ялғауҙарын ҡулланыу.
12. Йорт хайуандары һәм ҡоштары.- 2 сәғәт.
Ошо темаға ҡараған һүҙҙәр, уларҙы дөрөҫ әйтеү.

13. Ҡырағай хайуандар һәм ҡоштар.- 3 сәғәт.
Темаға ҡараған һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Һүҙҙәрҙә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар.
14. Йомғаҡлау. – 1 сәғәт.
Беренсе класта өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре, һөйләмдә һүҙҙәрҙең урыны.

III. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе – 2-се класс

1. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

1. **Танышыу - 2 сәғәт**.

Һин кем? Һеҙ кем? Һинең исемең кем(нисек)? Һин ҡайҙа йәшәйһең? Һиңә нисә йәш? Һорауҙарына яуап биреү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен (ә, һ, ң, ҙ, ү) үҙләштереү; темаға ҡараған башҡорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен камиллаштырыу.

2. **Был мин – 2 сәғәт.**

Кешенең организмы, тән өлөштәре атамаларын үҙләштереү, тәнде таҙа тотоу, һаулыҡты һаҡлау. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен (ҡ) үҙләштереү. **Минең**, **һинең, уның** алмаштарының мәғәнәләренә төшөнөү, уларҙы ҡулланып (ауырта-ауыртмай) һөйләмдәр төҙөү.

3. **Минең ғаиләм – 3 сәғәт**.

Үҙенең ғаиләһе, ғаилә ағзалары, уларҙың эштәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте тураһында һөйләшеү. Башҡорт телендә эйәлек ялғауҙарын практик үҙләштереү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен (ғ, ө) үҙләштереү. Нимә эшләй? һорауына яуап биреү.

4. **Мин нимә яратам? – 2 сәғәт**.

Үҙең, үҙеңдең ғаилә ағзалары, уларҙың эштәре, тураһында һөйләшеү. Башҡорт милли аштары тураһында һөйләшеү. Аш-һыу приборҙары һүҙҙәрен ҡулланып (нимә менән?) һөйләмдәр төҙөү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен (ҫ) үҙләштереү.

5. **Минең мәктәбем– 2 сәғәт.**

Балаларҙың үҙҙәре уҡыған мәктәп, уның үҙенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, кабинеттарын белеүе. Һүҙҙәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе. Ниндәй? һорауына яуап биреү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Диалог төҙөргә өйрәнеү.

6. **Минең класым – 1 сәғәт.**

Мәктәп, класс бүлмәләре, дәрестәр, кластағы уҡыусылар, уларҙың эштәре. Темаға ҡараған һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Өндәү һәм һорау һөйләмдәр. Ниндәй? һорауына яуап биреү.

7. **Мин мәктәпкә йыйынам – 1 сәғәт.**

Мәктәп, класс бүлмәләре, дәрестәр, кластағы уҡыусылар. Уларҙың эштәре. Һөйләмдәр төҙөү, уҡыу, һөйләү.

8. **Мин уҡыусы – 1 сәғәт.** Диалог.

Мин мәктәпкә йыйынам. Кроссворд. Нисек? һорауына яуап биреү.

9. **Мин дәрестә - 2 сәғәт.**

Текст. Минең дуҫым. Һүрәтле текст. Артур мәктәпкә бара. Ҡайҙа? һорауына яуап биреү. Эргәһендә-в (предлог), внутри мәғәнәһен үҙләштереү. Ҡайҙа? Өҫтөндә-на(педлог), аҫтында-под (предлог) мәғәнәләрен үҙләштереү.

10. Мин дәрестән сыҡтым– 4 сәғәт. Сюжетлы һүрәттәр. Түңәрәктәр. Беҙ түңәрәккә йөрөйбөҙ. Тәнәфестә. Алинаның көн тәртибе. Нимә эшләйем? һорауына яуап биреү. План буйынса һорауҙарға яуап биреү, һөйләү. Башҡорт теленең специфик өндәренең әйтелешен һәм яҙылышын өйрәтеү.

11. Минең уйынсыҡтарым – 3 сәғәт.

Уйынсыҡтар магазины. Сюжетлы һүрәттәр. Тиҙҙән Яңы йыл етә. Тәртип ҡағиҙәләре. Нимә? Нимәләр? Нindәй? һорауҙарына яуап биреү. Бәйләнешле текст, диалог төҙөү. Нимә эшләйбеҙ? Нимә эшләмәйбеҙ? һорауҙарына яуап биреү. Тексттың йөмәткеһә өҫтөндә эш. Нимә эшләмә? һорауына яуап биреү. Һорауҙарға таянып бәйләнешле текст төҙөү.

12. Мин уйнарға яратам – 1 сәғәт.

Сюжетлы һүрәттәр. Ҡышҡы уйындар. Беҙҙең катокта. Нимә эшләйбеҙ? һорауына яуап биреү. Тексттың йөмәткеһе өҫтөндә эш. Бәйләнешле текст, диалог төҙөү.

13. Мин уйнарға сығам – 2 сәғәт.

Һүрәтле текст. Миңә нимә кәрәк? һорауына яуап биреү. Кәрәк, кәрәкмәй һүҙҙәрен үҙләштереү.

14. Мин уйнарға сыҡтым – 2 сәғәт. Картина. Башҡорт өндәрен һәм хәрефтәрен дөрөҫ уҡыу, яҙыу. Нисәнсе? һорауына яуап биреү. Картинаны тасуирлау.

15. Минең кескәй дуҫтарым – 2 сәғәт. Сюжетлы һүрәттәр. Халыҡ ижады. Текст. Тест һорауҙары. Был нимә? Ниндәй? һорауҙарына яуап биреү. План буйынса һорауҙарға яуап биреү, бәйләнешле текст төҙөү.

16. Мин ял итәм - 2 сәғәт.

Сюжетлы һүрәттәр. Хайуандар тураһында әкиәттәр. Ҡайҙа? Ҡайҙан? Ҡасан? һорауҙарына яуап биреү. План буйынса һорауҙарға яуап биреү, бәйләнешле текст төҙөү. Был нимә?Нимәгә? һорауҙарына яуап биреү. Һорауҙарға таянып бәйләнешле текст төҙөү.

17. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау - 4 сәғәт

Һүрәтле текст. Таблица. Сюжетлы һүрәттәр, картина. Тәүлекте, ваҡытты сәғәттәрҙә билдәләү. Ҡасан? Нимә менән? һорауҙарына яуап биреү. Таблица тултырыу(Үҙем Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен дөрөҫ билдәләү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. менән алам. Өйҙә ҡалдырам.). Нимә эшләйбеҙ? һорауына яуап биреү. Сюжетлы һүрәттәр буйынса хикәйә (текст-Лагерҙа көн тәртибе.).

III. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе – 3-сө класс

1. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

Тема	Сәғәт	Йөкмәткеһе
1. һаумы, мәктәп!	**1 сәғәт**	Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы,таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, иман тураһында һөйләшеүҙәр,әҫәрҙәр уҡыу.

1)Үтелгәндәрҙе ҡабатлау		Башҡорт телендә өндәрҙең, хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. *Ярай, ярамай, мөмкин* һүҙҙәренең ҡулланышын активлаштырыу.
2. Мин танышам 2) һин кем? 3)һин ҡайҙа йәшәйһең? 4-6) һин ҡайҙан?	**5 сәғәт**	Иҫәнләшеү. Танышыу диалогы. Һин ҡайҙан? Һиңә нисә йәш? Һинең туғандарың бармы? (Сәнғәтле һөйләшеү.) Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре. Хат яҙыу.
3. Мин белем алам 7—8) Был нимә? Бармы? 9-10) Нимәһеҙ?	**4 сәғәт**	Мәктәптә белем алыу, класс бүлмәһе, дуҫлыҡ, берҙәмлек тураһында һөйләшеүҙәр,әҫәрҙәр уҡыу.
4. Мин һәм минең ғаиләм 11) Кем? Нимә эшләй? 12-13) Нимә эшләргә тейеш?	**3 сәғәт**	Ғаилә ағҙалары, уларҙың үҙеңә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Был атамаларҙы үҙләштереү. Темаға бәйләнешле яҡындарҙың эш-шөғөлдәре, уй-хыялдары, киләсәккә пландары. Ғаилә шәжәрәһе, уның әһәмиәте хаҡында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Башҡорт телендә бойороҡ һәм шарт һөйкәлеше. Уларҙың формаларын телмәрҙә ҡулланыу. Яҙыу һәм һөйләү күнекмәләрен ҡамиллаштырыу.
5. Мин һөнәр һайлайым 14—15) Кем ҡайҙа эшләй?	**2 сәғәт**	Һөнәр атамалары, таныш һәм яҡын кешеләрҙең шөғөл-һөнәрҙәре, уларҙың яҡшы сифаттары тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Туғанлыҡ мөнәсәбәттәре.Уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Башҡорт телендә теләк мәғәнәһенең бирелеше, ул формаларҙы практик үҙләштереү. *Булып эшләй* һүҙбәйләнешен ҡулланыу.

6. Мин тәбиғәтте яратам 16-17)Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?	**2 сәғәт**	Кеше һәм тәбиғәт. Башҡортостан тәбиғәте. Беҙҙә йәшәгән кейектәр, үҫемлектәр, бөжәктәр. Кешенең уларға мөнәсәбәте. Тәбиғәткә һаҡсыллыҡ тураһында һөйләшеүҙәр. Башҡорт телендә синоним һүҙҙәрҙе сағыштырыу, ҡылымдарҙың заман формаларын, ҡаршы ҡуйыу теркәүестәрен практик үҙләштереү. Телмәр күнекмәләрен ҡамиллаштырыу.
7. Минең яратҡан миҙгелем. 18-20) Нимә? Нимә эшләй? 21-22) Минең яратҡан миҙгелем.	**5 сәғәт**	Башҡортостанда, үҙебеҙ йәшәгән төйәктә көҙ, ҡыш, яҙ, йәй миҙгелдәре, уларҙың билдәләре. Тәбиғәттең төрлө күренештәре. Миҙгелдәргә ярашлы балаларҙың эштәре, уйындары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр, һынамыштар менән танышыу. Көн торошона бәйле һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу, телмәр күнекмәләрен үҫтереү, һөйләм төрҙәре. Тасуирлау элементтары.
8. Минең гардеробым 23-26) Ниндәй?	**4 сәғәт**	Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр береһен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, тыйнаҡлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Башҡорт телендәге йөкмәтеү йүнәлешен, шарт һөйкәлешен практик үҙләштереү. Был формаларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Матур теләктәр әйтергә өйрәтеү.
9. Минең тыуған көнөм 27-29) Ҡасан?	**3 сәғәт**	Балаларҙың тыуған көн байрамы, уға әҙерлек мәшәҡәттәре. Тыуған көн байрамын үткәреү әолаһы. Ҡунаҡтар саҡырыу, уларға хөрмәт күрһәтеү, мәжлестә үҙеңде тотоу тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу, шиғырҙар ятлау.Итәғәтлелек нормаларын үҙләштереү. Башҡорт телендәге бойороҡ, теләк һөйкәлеше формаларын практик үҙләштереү.Әҙәплелек нормаларын белдереүсе һүҙҙәр һәм һөйләмдәр. Саҡырыу ҡағыҙы, ҡотлау.
10. Мин сәйәхәтсе 30-33) Нимә менән? Нисек?	**4 сәғәт**	Сәйәхәт, уның кешегә файҙаһы, әһәмиәте, сәйәхәт урындары, йүнәлештәре, спорт һәм сыныҡыу тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Килеш ялғауһары, кире ҡағыу формаларын *менән* бәйләүесен телмәрҙә ҡулланыу.
11. Ҡабатлау 34)	**1 сәғәт**	Уҡыу йылы буйынса өйрәнелгәндәрҙе ҡабатлау, белгәндәрҙе ҡабатлау, белгәндәрҙе тәрәнәйтеү, һүҙлекте байытыу. Телмәр күнекмәләрен ҡамиллаштырыу.

III. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе – 4-се класс

1. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

Тема	Сәғәт	Йөкмәткеһе
1. Көн дә мәктәпкә барам һаумы, мәктәп!	**5 сәғәт**	1. 1) Беренсе сентябрь — Белем көнө! Үтелгәндәрҙе ҡабатлау 2) Мин мәктәпкә ни өсөн йөрөйөм? Һөйләм. 2. 3) Мин ниндәй дәресте яратам / яратмайым? Һөйләм 4—5) Мин нимә уҡырға яратам? Исем. 3. 6) Мәктәптәге дуҫтарым менән таныштырайыммы? Исем 4. 7—8) Беҙ мәктәптә нимә тураһында һөйләшәбеҙ? Исем. 5. 9) Телмәр үҫтереү. Исем
2. Мин ғаиләмде яратам	**5 сәғәт**	6. 10) Беҙгә бергәләп күңелле. Сифат 11—12) Мин — тәрбиәле бала. Сифат 7. 13) Минең өйҙәге бурыстарым. Сифат 8. 14—15) Минең яратҡан шөғөлөм. Сифат 9. 16) Мин йәшәгән бүлмә. Сифат 10. 17) Минең кескәй дуҫтарым. Сифат
3. Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем	**5 сәғәт**	11. 18) Мин йәшәгән Ер. Алмаш 19) Мин йәшәгән йорт/район. Алмаш 12. 20) Минең күршеләрем. Алмаш 13. 21) Мин яратҡан урындар. Алмаш 14. 22) Беҙҙең урам/йорт балалары. Алмаш 15. 23—24) Беҙҙең уйындарыбыҙ. Алмаш
4. Ауылда, ҡалала йәшәйем	**5 сәғәт**	16. 25—26) Минең тыуған ауылым/ҡалам. һан 27—28) Ауыл һәм ҡала тормошо. Һан 17. 29) Ҡалалағы һәм ауылдағы эштәр, һан 18. 30—31) Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары, һан 19. 32—33) Тыуған ерем мөғжизәләре, һан 20. 34) Телмәр үҫтереү, һан

5. Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ	**5 сәғәт**	21. 35—36) Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә? Рәүеш 22. 37—38) Йәнлектәр йыл миҙгелен беләме? Рәүеш 39—40) Бөжәктәр нисек йәшәй? Рәүеш 23. 41—42) һауа торошон белеү ниңә кәрәк? Рәүеш 24. 43—44) Киләсәктә тәбиғәттә үҙгәрештәр буламы? Рәүеш 25. Телмәр үҫтереү, рәүеш
6. Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ	**3 сәғәт**	26. 45—46) Минең тормошомдағы ҡыҙыҡлы хәлдәр. Ҡылым 27. 47) Мажаралар илендә. Ҡылым 48) Минең иң ҙур хыялым. Ҡылым 28. 49—50) Минең кумирҙарым. Ҡылым 51) Телмәр үҫтереү дәресе. Ҡылым
7. Һатып алырға өйрәнәм	**5 сәғәт**	29. 52—53) Минең бюджет. Ҡылым 30. 54—55) Мин кейем һатып алам. Ҡылым 31. 56) Мин модалы кейем яратам. Ҡылым 32. 57—58) Бүләк һайлайым. Ҡылым 33. 59) Телмәр үҫтереү. Ҡылым
8. Ҡабатлау	**1 сәғәт**	34. Уҡыу йылы буйынса өйрәнелгәндәрҙе ҡабатлау, белгәндәрҙе ҡабатлау, белгәндәрҙе тәрәнәйтеү, һүҙлекте байытыу. Телмәр күнекмәләрен ҡамиллаштырыу.

2. Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙең үҙләштерелеүен баһалау

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән 1-4-се кластарҙа түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

Белем кимәлен диагностикалау формалары:

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:	1-се класс	2-се класс	3-ө класс	4-се класс
Контроль күсереп яҙыу	1	2	1	1
Һорауҙарға яуаптар	1	0	1	1
Контроль диктант	1	1	3	2
Изложение	0	0	1	1
Инша	0	0	2	2

<u>Башҡорт теленән тематик планлаштырыу</u>

Бүлек, тема (сәғәт)			
Класс			
1	**2**	**3**	**4**
1. Башҡортостан- минең тыуған республикам - 1 сәғәт	**1. Танышыу - 2 сәғәт**. Һин кем? Һеҙ кем? Һинең исемең кем(нисек)? Һин ҡайҙа йәшәйһең? Һиңә нисә йәш? Һорауҙарына яуап биреү.	**1. һаумы, мәктәп! – 1 сәғәт** 1)Үтелгәндәрҙе ҡабатлау	**1. Көн дә мәктәпкә барам һаумы, мәктәп! - 5 сәғәт**
2. Танышыу - 4 сәғәт	**2. Был мин – 2 сәғәт.** **Минең, һинең, уның** алмаштарының мәғәнәләренә төшөнөү, уларҙы ҡулланып (ауырта-ауыртмай) һөйләмдәр төҙөү.	**2. Мин танышам - 5 сәғәт** 2) һин кем? 3)һин ҡайҙа йәшәйһең? 4-6) һин ҡайҙан?	**2. Мин ғаиләмде яратам - 5 сәғәт**
3. Ғаилә – 4 сәғәт.	**3. Минең ғаиләм – 3 сәғәт**. Нимә эшләй? һорауына яуап биреү.	**3. Мин белем алам - 4 сәғәт** 7-8) Был нимә? Бармы? 9-10) Нимәһеҙ?	**3. Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем - 5 сәғәт**
4. Мәктәп – 1 сәғәт.	**4. Мин нимә яратам? – 2 сәғәт**. Нимә менән? һөйләмдәр төҙөү.	**4. Мин һәм минең ғаиләм - 3 сәғәт** 11) Кем? Нимә эшләй?	**4. Ауылда, ҡалала йәшәйем - 5 сәғәт**

		12-13) Нимә эшләргә тейеш?	
5. Уҡыу әсбаптары – 3 сәғәт.	**5. Минең мәктәбем – 2 сәғәт.** Ниндәй? һорауына яуап биреү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.	**5. Мин һәнәр һайлайым - 2 сәғәт** 14-15) Кем ҡайҙа эшләй?	**5. Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ - 5 сәғәт**
6. Төҫтәр – 2 сәғәт.	**6. Минең класым – 1 сәғәт.** Өндәү һәм һорау һөйләмдәр. Ниндәй? һорауына яуап биреү.	**6. Мин тәбиғәтте яратам - 2 сәғәт** 16-17)Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?	**6. Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ - 5 сәғәт**
7. Һандар - 2 сәғәт	**7. Мин мәктәпкә йыйынам – 1 сәғәт.** Һөйләмдәр төҙөү, уҡыу, һөйләү.	**7. Минең яратҡан миҙгелем - 5 сәғәт** 18-20) Нимә? Нимә эшләй? 21-22) Минең яратҡан миҙгелем.	**7. Һатып алырға өйрәнәм - 3 сәғәт**
8. Уйын, уйынсыҡтар - 3 сәғәт	**8. Мин уҡыусы – 1 сәғәт.** Диалог. Нисек? һорауына яуап биреү.	**8. Минең гардеробым - 4 сәғәт** 23-26) Ниндәй?	**8. Ҡабатлау - 1 сәғәт**
9. Кем ни эшләй? - 2 сәғәт	**9. Мин дәрестә - 2 сәғәт.** Ҡайҙа? һорауына яуап биреү. Эргәһендә-в (предлог), внутри мәғәнәһен үҙләштереү. Ҡайҙа? Өҫтөндә-на(педлог), аҫтында-под (предлог) мәғәнәләрен үҙләштереү.	**9. Минең тыуған көнөм - 3 сәғәт** 27-29) Ҡасан?	
10. Тән өлөштәре - 2 сәғәт	**10. Мин дәрестән сыҡтым – 4 сәғәт.** Нимә эшләйем? һорауына яуап биреү.	**10. Мин сәйәхәтсе – 4 сәғәт** 30-33) Нимә менән? Нисек?	
11. Кейем-һалым - 3 сәғәт	**11. Минең уйынсыҡтарым – 3 сәғәт.** Нимә? Нимәләр? Ниндәй? һорауҙарына яуап биреү. Бәйләнешле текст, диалог төҙөү. Нимә эшләйбеҙ? Нимә эшләмәйбеҙ? һорауҙарына яуап биреү. Нимә эшләмә? һорауына яуап биреү.	**11. Ҡабатлау - 1 сәғәт** 34)	
12. Йорт хайуандары һәм ҡоштары - 2 сәғәт	**12. Мин уйнарға яратам – 1 сәғәт.** Нимә эшләйбеҙ? һорауына яуап биреү.		
13.Ҡырағай хайуандар һәм ҡоштар - 3 сәғәт	**13. Мин уйнарға сыҡтым – 2 сәғәт.** Нисәнсе? һорауына яуап биреү.		
14. Ҡабатлау. Йомғаҡлау - 1 сәғәт	**14. Минең кескәй дуҫтарым – 2 сәғәт.** Был нимә? Ниндәй? һорауҙарына яуап биреү.		
	15. Мин ял итәм - 2 сәғәт.		

	Ҡайҙа? Ҡайҙан? Ҡасан? һорауҙарына яуап биреү. Был нимә? Нимәгә? һорауҙарына яуап биреү.		
	16. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау - 4 сәғәт		
Бөтәһе: 33 сәғәт	**Бөтәһе: 34 сәғәт**	**Бөтәһе: 34 сәғәт**	**Бөтәһе: 34 сәғәт**